И. Шарапов

# Йомаклы әлифба





# А а



1. Ауыҙы бар — көйшәмәй,
Теше бар — тешләмәй,
Ултырһаң — күтәрер,
Етәкләһәң — эйәрер.

| А | т |
|---|---|

2. Айға, көнгә күренмәй,
Ағас менән типә-тиң.

| А | ғ | а | с |
|---|---|---|---|

| ү | ҙ | ә | г | е |
|---|---|---|---|---|

3. Ағас башында көмөш алҡа.

| А | й |
|---|---|

4. Ике ағай йәнәш бара,
Бер-береһен уҙыша бара.

| А | я | ҡ | т | А | р |
|---|---|---|---|---|---|

5. Йәйен — урманда батша,
Ҡышын — ҡарҙан да аҫта.

| А | й | ы | у |
|---|---|---|---|

6. Аҡ ашъяулыҡ таптым,
Ер өҫтөнә яптым.

| ҡ | А | р |
|---|---|---|

7. Ямауы бар, йөйө юҡ.

| А | л | А |
|---|---|---|

| һ | ы | й | ы | р |
|---|---|---|---|---|

8. Үҙе бер ҙә ашамай,
Ашағанда бушамай.

| ҡ | А | л | А | ҡ |
|---|---|---|---|---|



# Б б



1. Туны бар — сапаны юҡ,
   Мыйығы бар — һаҡалы юҡ.

| Б | е | с | ә | й |
|---|---|---|---|---|

2. Аяғы юҡ — ил гиҙә,
   Күҙҙәре юҡ — йәш түгә.

| Б | о | л | о | т |
|---|---|---|---|---|

3. Биш балаға бер исем.

| Б | а | р | м | а | ҡ |
|---|---|---|---|---|---|

4. Бәләкәй генә малай
   Ағас төбөн ялай.

| Б | а | л | т | а |
|---|---|---|---|---|



5. Башы бар — сәсе юҡ,
   Күҙе бар — ҡашы юҡ,
   Ҡанаты бар — оса алмай,
   Болоттарҙы ҡоса алмай.

| Б | а | л | ы | ҡ |
|---|---|---|---|---|

6. Бер йомғаҡта ете тишек.

| Б | а | ш |
|---|---|---|

7. Йәнле йәнһеҙҙе туҡмай,
   Йәнһеҙ ҡысҡырып илай.

| Б | а | р | а | Б | а | н |
|---|---|---|---|---|---|---|

8. Көмөш ҡоршау —
   Ҡорһаҡҡа тышау.

| Б | и | л | Б | а | у |
|---|---|---|---|---|---|



# В в



1. Ҡумта эсендә кеше,
Йырлау, һөйләүҙә эше.

т е л е В и з о р

2. Эй ат саба, ат саба,
Һығыла билгенәһе.
Тояҡтары резинка,
Тимерҙән дилбегәһе.

а В т о м о б и л ь

3. Аяҡтары түңәрәк,
Ҡыуышалар тәгәрәп.

В е л о с и п е д

4. Дилбегә юҡ, йүгән юҡ,
Ҡамыт кәрәк тигән юҡ.
Ҡара айғырҙы екteләр,
Ултырҙылар киттеләр.

п а р о В о з

# Г г





1. Кем үҙ йортон елкәһендә
күтәреп йөрөй?

| | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Г | ө | б | ө | р | Г | ә | й | е | л |

2. Ат түгел — саба,
Урман түгел — шаулай.

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Г | ө | р | л | ә | ү | е | к |

3. Атлаһаң — атлай,
Туҡтаһаң — туҡтай.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| к | ү | л | ә | Г | ә |

4. Ауыҙы юҡ — күп телле,
Дәртләндермәй һуң кемде?

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| Г | а | р | м | у | н |

5. Гөлдөр-гөлдөр гөлдөрсөк,
Ҡыҙыл ситек, күк күлдәк.

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| к | ү | Г | ә | р | с | е | н |

6. Башы йәшел япраҡ,
Ятҡан ере тупраҡ,
Үҙе ҡыҙыл ит кеүек,
Тик ашарға ҡатыраҡ.

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| с | ө | Г | ө | л | д | ө | р |



# Ғ ғ



1. Ялт-йолт итә,
Ялмап йота.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| с | а | л | Ғ | ы |

2. Ҡояш ҡайҙа барһа,
уға ҡарап йылмая.

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| к | ө | н | б | а | Ғ | ы | ш |

3. Тауҙан бейек,
үләндән тәпәшәк.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| т | у | р | Ғ | а | й |

4. Иртә лә, кистә лә —
һәр ваҡыт эштә,
Ял итмәй һис тә.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| с | ә | Ғ | ә | т |

5. Көҙ сисенә, яҙ кейенә,
Йә, әйтеп ҡара, нимә?

| | | | |
|---|---|---|---|
| а | Ғ | а | с |

6. Эсе ҡыҙыл, тышы ҡара,
Ышанмаһаң, ашап ҡара.

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| ҡ | а | р | а | Ғ | а | т |

# Д д





1. Дүрт мөйөшлө,
икe ҡолаҡлы,
эсе-тышы затлы.

һ а н д ы ҡ

2. Төндә ҡараһам — күк тулған,
Иртән ҡараһам — юҡ булған.

й о н д о ҙ ҙ а р

3. Урманда үҫә,
Мунсала бешә.

м и н д е к

4. Түбә тамыр,
Уртаһы һеңер,
Осо май.

к и н д е р

5. Ат башында аҡ ҡапҡа.

д у ғ а

6. Муйыны дуға,
арҡаһы эйәр.

д ө й ә

7. Үҙе һөйләй, үҙе көйләй,
Үҙе күҙгә күренмәй,
Сағыпһаң — килмәй.

р а д и о



# З з





1. Һыуҙа йөҙә,
Күктә оса,
Ерҙә йөрөй,
Ит менән һыйлай.

| | | |
|---|---|---|
| ҡ | а | ҙ |

2. Яңғыҙ мине ашамайҙар,
Минән башҡа йәшәмәйҙәр.

| | | |
|---|---|---|
| т | о | ҙ |

3. Ай янында алтмыш күҙ,
Алтмышы ла алтын күҙ.

| | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| й | о | н | д | о | ҙ | ҙ | а | р |

4. Бәләкәй генә бер көсөк
Өрмәй ҙә, ебәрмәй ҙә.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| й | о | ҙ | а | ҡ |

5. Бешәләр, бешәләр ҙә,
ҡойоп эсәләр.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ҡ | ы | м | ы | ҙ |

6. Үҙе атҡа атланған,
Аяҡтары артҡа ҡалған.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| к | ү | ҙ | л | е | к |



# Е е



1. Ана бара хан,
   Ауыҙы-мороно ҡан.

б ү р Е

2. Ер аҫтында алтын ҡаҙыҡ.

к и ш Е р

3. Бер һарай эсендә
   утыҙ ике аҡ тауыҡ.

т Е ш

4. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ
   ҡапҡа аса.

Е л

5. Ҡыҙыл төймә таптым,
   Ауыҙыма ҡаптым.

Е л ә к

6. Йәбешкәнгә лә йәбешкән,
   Йәбешмәгәнгә лә йәбешкән.

и с Е м

7. Ағайҙан да бейек,
   Бабайҙан да бейек,
   Батшанан да бейек,
   Һалдаттан да бейек.

б ү р Е к

# Ё ё





Ҡанаты бар — йөнө юҡ,
Үҙе бара — юлы юҡ.

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| с | а | м | о | л | Ё | т |

**Был һүҙҙәрҙе уйлап тап!**

| | | | |
|---|---|---|---|
| Ё | л | к | а |

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| в | е | р | т | о | л | Ё | т |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | Ё | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | Ё | |










Был һүҙҙәрҙе уйлап
тап!

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| ж | у | р | н | а | л |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| д | и | р | и | ж | е | р |

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| д | е | ж | у | р | н | ы | й |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ж | и | р | а | ф |

Йәй йәйләнем,
Ҡыш ҡышланым,
Йәшел хәтфәнән
Тун тышланым.

| | | | |
|---|---|---|---|
| у | ж | ы | м |

# З з



1. Яланы йәшелдән,
   Кәртәһе көмөштән,
   Биле бормалы,
   Сите уҡалы,
   Эсе юхалы.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| к | а | м | з | у | л |

2. Үҙе шарҙай,
   Эсе ҡандай,
   Тәме балдай.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| ҡ | а | р | б | у | з |



3. Ҡамыты юҡ, дуғаһы юҡ
   Ҡара атым егеүле.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| п | о | е | з | д |

4. Кеше түгел, һаҡаллы.

| | | | |
|---|---|---|---|
| к | ә | з | ә |



# И и






1. Ингәндә ҡаршы ала,
Сыҡҡанда оҙатып ҡала.

| И | ш | е | к |
|---|---|---|---|

2. Айыу аҡыра, йөнө ҡойола.

| т | И | р | м | ә | н |
|---|---|---|---|---|---|

3. Алтын бишек —
Төбө тишек.

| И | л | ә | к |
|---|---|---|---|

4. Тей тиһәң, теймәй,
Теймә тиһәң, тейә.

| И | р | е | н |
|---|---|---|---|

5. Ағас түгел — япраҡлы,
Тун түгел — тегелгән.

| к | И | т | а | п |
|---|---|---|---|---|

6. Алалар бысаҡ,
Яралар мине.
Минһеҙ булмайҙыр
Донъяның йәме.

| И | к | м | ә | к |
|---|---|---|---|---|



# Й й





1. Үҙенән койроғо оҙон.

т е й е н

2. Үҙе бар — күләгәһе юк.

й ы л ғ а

3. Өй башында ярты икмәк.

а й

4. Ике осонда дүңгәләк,
   Уртаһында бер ҡаҙаҡ.

ҡ а й с ы

5. Ер аҫтында ерән атым.

й о м р а н

6. Тоҡ, күләгәһе юҡ.

ҡ о й о

7. Аҡ кейем кейгән,
   Йәшел суғын элгән.

ҡ а й ы н

8. Бәләкәй генә аҡ тана
   Мөгөҙөм бар тип мактан.

с ә й н ү к

# К к





1. Өй артында уҫал еңгә
Семтеп ала, өтөп ала.

К е с е р т К ә н

2. Ана бара — юлы юҡ.

К ә м ә

3. Иң башта була дүрт аяҡлы,
Шунан була ике аяҡлы,
Шунан була өс аяҡлы.

К е ш е

4. Ҡуян ҡолаҡлы,
ат тояҡлы.

и ш ә К

5. Ат түгел, кешнәмәй,
Йөҙ аттан кәм эшләмәй.

т р а К т о р

6. Арымай-талмай,
Арттан ҡалмай.
Атлаһаҡ — атлай,
Туҡтаһаҡ — туҡтай.

К ү л ә г ә

7. Осо нәҙек, төбө йыуан,
Ярата уны ҡуян.

К и ш е р

# Ҡ ҡ





1. Ҡырҙа үҫкән бер бала
Өйгә килеп моң һала.

| Ҡ | у | р | а | й |
|---|---|---|---|---|

2. Аяғы юҡ, ҡулы юҡ —
Үҙе һүрәт төшөрә.

| һ | ы | у | ы | Ҡ |
|---|---|---|---|---|

3. Аҡ бабай, аҡ бабай,
Аҡ туныңды ҡаҡ, бабай.

| Ҡ | ы | ш |
|---|---|---|



4. Кәүҙәһе юҡ — ҡулы бар
Ауыҙы юҡ — теше бар.

| б | ы | с | Ҡ | ы |
|---|---|---|---|---|

5. Ятты-ятты ла
Тороп йылғаға аҡты.

| Ҡ | а | р |
|---|---|---|

6. Ай бирҙе, ҡояш алды.

| ы | с | ы | Ҡ |
|---|---|---|---|

7. Үҙе йомро — ай түгел,
Төҫө һары — май түгел,
Ҡойроғо бар — сысҡан т

| ш | а | л | Ҡ | а | н |
|---|---|---|---|---|---|

# Л л





1. Ҡыҙарып беште,
   ергә төштө.

   а л м а

2. Ҡулы юҡ, аяғы юҡ —
   Тәҙрәмде ҡаҡҡылай,
   Тартҡылай, һуҡҡылай,
   Өйгә инергә һорай.

   е л

3. Һөйәге юҡ, ние юҡ,
   Һөйләмәгән һүҙе юҡ.

   т е л

4. Аҫылынып тора груша —
   ашап булмай.

   л а м п а

5. Көмөш тәнле, ите тәмле.

   б а л ы ҡ

6. Үҙе аға — яры юҡ,
   Барып еткән ере юҡ.

   б о л о т

7. Башы — тауҙа,
   Аяғы — диңгеҙҙә.

   й ы л ғ а

# М м





1. Ура, һуға, елгәрә,
Үҙе тейәп ебәрә.

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| к | о | м | б | а | й | н |

2. Бикле келәт эсендә
ҡара ҡом.

| | | |
|---|---|---|
| м | ә | к |

3. Ағас башы туҡылдыҡ,
Туҡый-туҡый туҡ булдыҡ.

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| т | у | м | ы | р | т | ҡ | а |

4. Олоһо ла, кесеһе лә
эшләпә кейгән.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| б | ә | ш | м | ә | к |

5. Ҡыш — яланғас, йәй
булһа — кейенә.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| у | р | м | а | н |

6. Күктән килде, ергә ятты.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| я | м | ғ | ы | р |



# Н н





1. Ҡойроғо бик ҡыҫҡа,
Мөгөҙө ботаҡтай,
Сабырға бик оҫта.

| б | о | л | а | Н |
|---|---|---|---|---|

2. Йөнө йомшаҡ, үҙе ҡурҡаҡ.

| ҡ | у | я | Н |
|---|---|---|---|

3. Өй башында айыу бейей.

| т | ө | т | ө | Н |
|---|---|---|---|---|

4. Ҡара һыйыр килде,
Бөтә донъяны еңде.

| т | ө | Н |
|---|---|---|

5. Аяҡһыҙ-ҡулһыҙ күлдәк кейә.

| м | е | Н | д | ә | р |
|---|---|---|---|---|---|

6. Бәләкәй генә бөкрө
Алыҫ ергә төкөрҙө.

| Н | а | г | а | Н |
|---|---|---|---|---|

7. Тәкә тунын һалдырҙым,
Эсен тышҡа ябындым.

| т | у | Н |
|---|---|---|

8. Оҙон инем — ҡырҡылдым,
Йыуан инем — ярылдым,
Инде утҡа тарылдым.

| у | т | ы | Н |
|---|---|---|---|



# Ң



1. Оҙон-оҙон осло ул,
   Осло тимер башлы ул.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| һ | ө | Ң | г | ө |

2. Алтын аҙбар эсендә
   Ала ҡолоном кешнәй.

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| ҡ | ы | Ң | ғ | ы | р | а | у |

3. Сик-сик итә лә ситкә ҡуна.

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| с | и | Ң | е | р | т | к | ә |

4. Арлы-бирле боролған,
   Башына ҡыуыш ҡоролған.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| ө | й | ә | Ң | к | е |

5. Аттан бейек,
   Эттән тәпәшәк.

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| ы | Ң | ғ | ы | р | с | а | ҡ |

6. Кәкре муйын ағайҙар
   Ҡарға батмай баралар.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| с | а | Ң | ғ | ы |



# О о



1. Торҡо-тарҡы тора ла
Күккә менеп юғала.

| т | о | р | н | а |
|---|---|---|---|---|

2. Өйөм башы ҡырсын таш.

| й | о | н | д | о | ҙ | ҙ | а | р |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|

3. Өйөм башы оло икмәк.

| ҡ | о | я | ш |
|---|---|---|---|

4. Балтанан ауыр,
Балдан татлы.

| й | о | ҡ | о |
|---|---|---|---|

5. Аҡ көсөгөм йүгерә-йүгерә
ҙур булды.

| о | р | с | о | ҡ |
|---|---|---|---|---|

6. Килделәр ағайҙар балтаһыҙ,
Күпер һалдылар балтаһыҙ.

| б | о | ҙ |
|---|---|---|

7. Тәпәш күктән ҡар яуа.

| о | н |
|---|---|

| и | л | ә | ү |
|---|---|---|---|

8. Йомро-йомро йомарлам,
Йомроһоҙ тора алмам.

| ҡ | о | р | о | т |
|---|---|---|---|---|



# Ө ө



1. Быяла һауыт эсендә
Ҡара ҡыҙҙар йүгерә.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| һ | ө | л | ө | к |

2. Ҡыҙыл билле ҡыҙ килде,
Ҡыланды ла юғалды.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| т | ө | л | к | ө |

3. Тигеҙ генә быяла,
Үҙе минән ояла.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| к | ө | ҙ | г | ө |

4. Көндөҙ йоҡланым,
Төндә иланым.

| | | |
|---|---|---|
| ө | к | ө |

5. Береһе аҡ булған,
Береһе ҡара булған.

| | | |
|---|---|---|
| к | ө | н |

,

| | | |
|---|---|---|
| т | ө | н |

6. Осоп киләм, осоп киләм,
Күҙгә эләккәнде тибеп киләм

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| б | ө | р | к | ө | т |



# П п



1. Ашағаны тимер, тәкәргәне ут,
Унан дошманға тынғы юҡ.

| П | у | ш | к | а |

2. Алма тиһәң, алма түгел,
Ҡыяр тиһәң — түңәрәк.

| П | о | м | и | д | о | р |

3. Әнәһе бар — тегә алмай.

| т | е | р | П | е |

4. Йүгерә белмәй,
Һикерә белә.

| т | у | П |

5. Үҙе бер ҡарыш,
Һаҡалы мең ҡарыш.

| а | р | П | а |

6. Нескә билле бер ҡыҙый
Бейеп туҙан туҙҙыра.

| һ | е | П | е | р | т | к | е |

7. Ҡат-ҡат ҡатлама,
Аҡылың булһа, ташлама.

| к | и | т | а | П |

# Р р





1. Ятһа — ҡуяндай,
   Торһа — дөйәләй.

| | | | |
|---|---|---|---|
| э | й | ә | Р |

2. Һыу өҫтөндә төҫлө
   көйәнтәләр.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| й | ә | й | ғ | о | Р |

3. Шәкәр тиһәң, шәкәр түгел,
   Һөт тә түгел — үҙе аҡ,
   Мамыҡ тиһәң, мамыҡ түгел,
   Йә, был нимә? Уйлап тап!

| | | |
|---|---|---|
| ҡ | а | Р |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| Р | а | к | е | т | а |

7. Айға тиһәң, айға осор,
   Ҡайҙа ҡушһаң, шунда төшөр

4. Үҙе һөйләй, үҙе күренмәй.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| Р | а | д | и | о |

5. Ҡалаһы бар — халҡы юҡ,
   Диңгеҙе бар — һыуы юҡ.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| к | а | Р | т | а |

6. Урамда айыу олой.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| б | у | Р | а | н |

# С с





1. Алған һайын ҙурая бара.

| С | о | ҡ | о | р |
|---|---|---|---|---|

2. Ер аҫтында ҡыҙыл әтәс.

| С | ө | г | ө | л | д | ө | р |
|---|---|---|---|---|---|---|---|

3. Суҡышһыҙ сәпсек боҙ тишә.

| т | а | м | С | ы |
|---|---|---|---|---|



4. Ҡойроғон ҡайсылап,
Ауыҙын тамсылап,
Ағасһыҙ, мөйөшһөҙ,
Өй һалды еүешләп.

| ҡ | а | р | л | у | ғ | а | С |
|---|---|---|---|---|---|---|---|

5. Баҙҙа йәшәй, дошманы — бесәй.

| С | ы | С | ҡ | а | н |
|---|---|---|---|---|---|

6. Ҡарап торһаң — йәне юҡ,
Тупраҡ ашай, һыу эсә,
Үҙе юғары үҫә.

| а | ғ | а | С |
|---|---|---|---|



# ҫ



1. Үҙе йәнһеҙ — ике башлы.

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| т | а | Ҫ | т | а | м | а | л |

2. Ҡат-ҡат тунлы,
ҡарыш буйлы.

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| к | ә | б | е | Ҫ | т | ә |

3. Дүрт егеткә бер бүрек.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ө | Ҫ | т | ә | л |

4. Ҡағылдым, һуғылдым,
Түргә килеп һуҙылдым.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| б | а | л | а | Ҫ |

5. Өйөм-өйөм өйөлгән,
Өйөмә берәү һөйәлгән.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| б | а | Ҫ | ҡ | ы | с |

6. Биле нәҙек билән ат,
Барыһынан да көслө ат.
Тауға менһә, таймаҫ ат,
Арыу-талыу белмәҫ ат.

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| ҡ | ы | р | м | ы | Ҫ | ҡ | а |

7. Кеше тиһәң — дүрт аяҡлы,
Хайуан тиһәң — үрмәләй.

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| к | е | Ҫ | ә | р | т | к | е |



# Т т



1. Тибенә лә суҡына,
   Тамағы туймай,
   Йәне тынмай.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| Т | а | у | ы | ҡ |

2. Һыу өҫтөндә һары май.

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Т | о | м | б | о | й | о | ҡ |

3. Елдән арта, һыуҙан ҡайта.

| | |
|---|---|
| у | Т |

4. Ауыҙы юҡ — өтөп ала.

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| Т | е | г | ә | н | ә | к |

5. Ас булһа — ята,
   Туҡ булһа — тороп ултыра.

| | | |
|---|---|---|
| Т | о | ҡ |

6. Энәһен тотҡан,
   Юл буйына сыҡҡан.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| Т | е | р | п | е |

7. Кешенең дуҫы,
   Йорттоң һаҡсыһы.

| | |
|---|---|
| э | Т |

8. Теше күп — ашамай.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| Т | а | р | а | ҡ |

# У у





1. Бәләкәй генә бөкрө
Ялан ерҙе бөтөрҙө.

у р а ҡ

2. Күрергә күркәм,
Тоторға ҡурҡам.

у т

3. Ерҙә үҫтем — тун тышланым,
Өҫтәлгә мендем — туным
ташланым.

к а р т у ф

4. Уны туҡмайҙар, һуғалар,
Ул иламай, һикерә генә.

т у п

5. Йәйен һоро, ҡышын аҡ,
Уға шулай яҡшыраҡ.

ҡ у я н

6. Үҙем тунайым,
Үҙем илайым.

һ у ғ а н

# Ү ү





1. Йомортҡа ла баҫмай,
Балаһын да баҡмай.

к ә к Ү к

2. Туҫтаҡ тулы һыу,
Һыуҙың өҫтө быу.

к Ү л

3. Һарайҙағы һары айғырым
Һағынғанда кешнәйҙер.

к Ү к     к Ү к р ә Ү

4. Йүгерәм, етә алмайым.

к Ү л ә г ә

5. Ҡойроғо — ҡоймала,
Башы — даръяла.

с Ү м е с

6. Ҡыҙыу табанлы сана
Бер сигенә, бер бара,
Юлы шымарып ҡала.

Ү т е к

7. Төндә элеүле,
Көндөҙ кейеүле.

б Ү р е к

# Ф ф





1. Тиреһен тунаным да
Итен сәйнәнем.

| к | а | р | т | у | ф |
|---|---|---|---|---|---|

2. Һоро йылан сорналған,
Муйыныма килеп уралған.

| ш | а | р | ф |
|---|---|---|---|

3. Кескәй генә күҙҙәре,
Мороно оҙон бигерәк.
Уның исемен әйтеү өсөн,
Өс кенә хәреф кәрәк.

| ф | и | л |
|---|---|---|

4. Ер аҫтында ҡара айғыр,
Ялдары ялбыр-йолбор.

| н | е | ф | т | ь |
|---|---|---|---|---|

5. Ҡарайһың төҫөн,
Таныйһың үҙен —
Үҙе юҡ.

| ф | о | т | о |
|---|---|---|---|

# Х х





1. Балыҡ түгел, ҡош түгел,
Һыуҙа йөрөй үҙе гел,
Суммай ҙа ул, осмай ҙа ул,
Ҡоро ергә сыҡмай ҙа ул.

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| п | а | р | о | х | о | д |

2. Һүҙе килә, үҙе юҡ.

| | | |
|---|---|---|
| х | а | т |

3. Аҡ ерҙә ҡара орлоҡтар.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| х | ә | р | е | ф |

4. Утыҙ ике һаны,
Ҡыйыш йөрөй, тура йөрөй,
Салыш йөрөй, ҡыя йөрөй,
Сатраш йөрөй, йыя йөрөй,
Ниндәй уйын? Таны!

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| ш | а | х | м | а | т |





# Һ һ



1. Бер үгеҙгә өс мөгөҙ.

Һ ә н ә к

2. Ике һөҙгөс,
Дүрт йөрөгөс,
Бер һелтәгес.

Һ ы й ы р

3. Ишектән инде,
Түргә менеп китте.

Һ ы у ы ҡ

4. Бәләкәй генә бисура
Билен быуып ултыра.

Һ е п е р т к е

5. Бабай ҡат-ҡат тун кейгән,
Сисендерһәң — иларһың.

Һ у ғ а н

6. Үҙе аҡ — ҡар түгел,
Үҙе шыйыҡ — һыу түгел.

Һ ө т

7. Ер өҫтөндә ятмайҙыр,
Үҙе һыуҙа батмайҙыр.

Һ а л



# Ц ц



цирк

цинк

циркуль

Ике тәгәрмәсле арба
Атһыҙ ҙа алға бара.

мотоцикл

**Был һүҙҙәрҙе уйлап тап!**

цех



# Ч ч





Үҙе уҡый белмәһә лә,
Ғүмер буйы яҙыша.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| р | у | ч | к | а |

Был һүҙҙәрҙе уйлап тап!

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ч | а | б | а | н |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| ч | е | р | т | ё | ж |

| | | | |
|---|---|---|---|
| м | а | т | ч |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | ч | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| ч | е | м | п | и | о | н |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| п | о | ч | т | а |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | ч | | |



# Ш ш





1. Оҙон ҡолаҡ — ҡуян түгел,
   Яй ҡуҙғала — һыйыр түгел.

| | | | |
|---|---|---|---|
| и | ш | ә | к |

2. Ҡышын да, йәйен дә йәм-йәшел.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ш | ы | р | ш | ы |

3. Аҡ егеттәр аңһыҙ,
   Уларһыҙ донъя һаңһыҙ.

| | | |
|---|---|---|
| т | ө | ш |

4. Бәләкәй генә һандыҡ,
   Эсе тулы халыҡ,
   Баштарында бүрек.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ш | ы | р | п | ы |

5. Ите һимеҙ — майы юҡ,
   Тиреһе ҡалын — йөнө юҡ.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| ш | а | л | ҡ | а | н |

6. Нәҙек оҙон,
   Ботағы юҡ.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ҡ | а | м | ы | ш |

7. Ҡар түгел — аҡ,
   Боҙ түгел — ҡаты,
   Тоҙ түгел — ирей.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ш | ә | к | ә | р |

# Щ щ

Был һүҙҙәрҙе уйлап тап!

| | |
|---|---|
| Щ | и |

| | | | |
|---|---|---|---|
| б | о | р | Щ |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| Щ | е | т | к | а |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | Щ |



# ъ

**Иҫеңдә ҡалдыр!**

Аҡъяр
донъя

янъял
даръя
аръяҡ

| а | ш |
|---|---|

| ъ | я | у | л | ы | ҡ |
|---|---|---|---|---|---|

| ҡ | у | л |
|---|---|---|





# Ы ы



1. Ҡолға башында бер өй,
Ҡунағым тәҙрәнән йөрөй.

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| с | ы | й | ы | р | с | ы | ҡ |

2. Һыуҙа йөҙә, ерҙә шыуа.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| й | ы | л | а | н |

3. Үҙе сабып бара.
Ҡойроғо күренмәй.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| й | ы | л | ғ | а |

4. Эсе көптәй, аяғы ептәй.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| һ | а | р | ы | ҡ |

5. Бабайым килә һағынып,
Аҡ толобон ябынып.

| | | |
|---|---|---|
| ҡ | ы | ш |

6. Орлоғо ҡара, ере аҡ,
Ҡул менән сәсәләр,
Күҙ менән йыялар.

| | | | |
|---|---|---|---|
| я | ҙ | ы | у |

7. Аяҡтары бар — йөрөмәй,
Арҡаһы бар — ятмай.

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| у | л | т | ы | р | ғ | ы | с |



# Ь



1. Аръяҡта ла яры бар,
Бирьяҡта ла яры бар,
Дүрт мөйөштә, ике ярҙа,
Йылым һымаҡ тоғо бар.

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| б | и | л | ь | я | р | д |

2. Ер ҡуйынында ҡара алтын.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| н | е | ф | т | ь |

3. Атһыҙ йөрөгән арба.

| | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| а | в | т | о | м | о | б | и | л | ь |

4. Бер уйлаһаң, иҫ китерлек:
Кәрәк булһа, ташлайҙар,
Кәрәклеге бөтөү менән,
Күтәрә лә башлайҙар.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| я | к | о | р | ь |

5. Әтәс түгел, ҡысҡыра,
Һәр кемдән иртә тора,
Тауышына уянһаң,
Мәктәпкә ашыҡтыра.

| | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| б | у | д | и | л | ь | н | и | к |

# Э э



1. Ҡойроғо уралған,
Теле һалынған.

| | |
|---|---|
| Э | т |

2. Һүндерһәң — һүнә,
Яндырһаң — яна,
Барып тотһаң — үлтерә.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| Э | л | е | к | т | р |



3. Арбаға ултырмаҫ,
Йәйәү йөрөмәҫ.

| | | | |
|---|---|---|---|
| Э | й | ә | р |

4. Өй башына мендем,
Ҡанатымды йәйҙем.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| Э | ш | л | ә | п | ә |

# Ә ә



1. Түңәрәк күлдә эт өрә.

| | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| т | ә | л | м | ә | р | й | е | н |

2. Боҙ өҫтөндә болан уйнай,
Ҡойроғонда йылан уйнай.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| й | ә | ш | е | н |

3. Ҡолағы бар — башы юҡ.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| б | и | ҙ | р | ә |

4. Һурпаһын эсәләр,
Итен түгәләр.

| | | |
|---|---|---|
| с | ә | й |



5. Өҫтәлемдә аҡ үгеҙ,
Маңлайында бер мөгөҙ.

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| с | ә | й | н | ү | к |

6. Башы — тараҡ, ҡойроғо —
ураҡ.

| | | | |
|---|---|---|---|
| ә | т | ә | с |

7. Аттан бейек, эттән тәпәш.

| | | | |
|---|---|---|---|
| э | й | ә | р |

# Ю ю



1. Оҙон-оҙон, оҙон ептең
   Осо ҡайҙан табылыр?

| Ю | л |
|---|---|



| Ю | р | ғ | а | н |
|---|---|---|---|---|

2. Көндөҙ — хәрәкәттә,
   Кис — хеҙмәттә.

# Я я





1. Бәләкәй генә йорт,
   Эсе тулы ҡорт.

| | | | |
|---|---|---|---|
| ҡ | ы | я | р |

2. Яҙ килһә — йәшәрә,
   Көҙ етһә — һарғая.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| я | п | р | а | ҡ |

3. Мейес төбөндә бер ҡалас.

| | | | |
|---|---|---|---|
| ҡ | о | я | ш |

4. Күктән килде, ергә ятты.

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| я | м | ғ | ы | р |

5. Күҙе-башы булмаһа ла,
   Күҙһеҙҙе йөрөтә.

| | | | |
|---|---|---|---|
| т | а | я | ҡ |



Торомтаева Рәмилә Юлай ҡыҙы,
Сибай ҡала гимназияһының  башланғыс кластар уҡытыусыһы

Материалдар алынды:
И.Шараповтың «Йомаҡлы әлифба» китабынан (Өфө, «Китап», 1996)